Башҡортостан Республикаһы Бөрйән районы муниципаль районының Тимер ауыл Советы ауыл биләмәһе Советының 2013 йылғы эшмәкәрлеге тураһында дөйөм йыйылыш протоколы

Тимер ауылы 17 февраль 2014 йыл

Ҡатнаша: район хакимиәте башлығының 1-се урынбаҫары Шәрипов Р.Д., Бөрйән урман хужалығы лесничие Әмиров Р.З.Бөрйән районының милек һәм ер менән идара итеү комитеты начальнигы Х.Н. Әбделмәнов, район халыҡты социаль яҡлау бүлеге етәксеһе Г.М.Әбүбәкирова, район Советы депутаты Юлчурин Т.Й., район мәғәриф бүлеге методисы Тажитова Л.Ш., район полиция отделениеһынан Рысбаев Р.Р., Тимер ауыл хакимиәте башлығы Р.К.Арыҫланғужина
Тимер ауыл халҡы - 68 кеше.
Председатель:Арслангужина Р.К.
Секретарь: Буранова Р.Н.

Көн тәртибе:
1. Тимер ауыл Советы ауыл хакимиәтенең 2013 йылдағы эшмәкәрлеге тураһында.
2. Бөрйән районы муниципаль район хакимиәтенең 2013 йылдағы эшмәкәрлеге тураһында.
3. Төрлөһө

Тимер ауылында 545 кеше йәшәй. 149 ғаилә бар, күп балалы ғаиләләр 25, 16 ғаиләлә 3-әр бала тәрбиәләнә, 5 - ғаилә лә - 4 бала, 4 ғаиләлә - 5 бала тәрбиәләнә. Халыҡта 572 баш эре мөгөҙлө, 687 баш ваҡ мал, 143 ат, 916 ҡош-ҡорт, 190 баш ҡорт бар. Үткән йыл менән сағыштырғанда малдар һаны артты. Шәхси хужалыҡта 1 - ДТ тракторы, 39 тәгәрмәсле трактор, йөк машинаһы - 18, еңел машина- 58 иҫәпләнә. Ауылда тулы булмаған урта мәктәп, балалар баҡсаһы, мәҙәниәт йорто, фельдшер-акушерлыҡ пункты, 2 КФХ, 3-шәхси эшҡыуар , 1- муниципаль унитар ауыл хужалығы предприятиеһы, 1 ғаилә фермаһы эшләй. Ауыл халҡын газета-журналдарға яҙылыуҙы һәм таратыуҙы почтальон Абдуллин Мөхәмәт Айса улы хеҙмәтләндерә.Бөгөнгө көнгә 270 дана газета- журнал таратыла. Ауыл биләмәһендә 53 пенсионер, 28 инвалид, шул иҫәптән 4 инвалид бала иҫәпләнә

Уҙған 2013 йылда Советтың 13 ултырышы уҙғарылып 51 һорау ҡаралып, 2 программа, 11 положение, 51 ҡарар ҡабул ителде. Ауыл биләмәһендә даими комиссияларҙан тыш, бер нисә комиссия эшләй.Уларҙың йыйылыштары уҙғарылып тора. Район прокуратураһында 11 проект экспертиза үтте һәм 6 протест алынды, уставҡа өҫтәлмә индерелеп, яңы устав ҡабул ителде. Республика юстиция министерствоһына 41 документ ебәрелде. Уҙған йылда 1 һайлау үтте. Ауыл биләмәһендә һайлауҙарға ҡатнашыу 88 процент тәшкил итте.

Күҙәтеү органдары тарафынан мал зыяраты, ҡый түгеү урыны, ауыл хужалығы ерҙәре, ут хәүефһеҙлеге, граждандар оборонаһы, ғәҙәти булмаған хәл, ветеринария ҡағиҙәләрен үтәү, ер ҡанундарын үтәү буйынса тикшереүҙәр булды һәм улар тарафынан 6000 һум күләмендә штраф һалынды.(2012 йылда 33000 ине)

Үткән йылда сабынлыҡтар бөтәһенәлә тигеҙ итеп бүленде, 22 кеше менән сабынлыҡтарҙы арендаға биреү өсөн договор төҙөлдө.Урал аръяғы зонаһынан 9 кешегә арендаға сабынлыҡ биреүгә ирешелде.( 2012 йылда бирелмәгән ине)

Пай ерҙәрен үҙләштереү буйынса байтаҡ эштәр эшләнде, Боһондо, Оло йылға тамағы яландарын шәхси милеккә әйләндереүгә документтар алынды.Ҡалған ерҙәргә лә документтар төҙөлә.

Бөгөнгө көнгә 211 пайщик булып, 23 кеше ерҙәрен приватизацияланы.МУП “Землемер “тарафынан протокол , акт төҙөлә. Өфөнән дөрөҫләү булһа, ҡалған ерҙәрҙә приватизацияланасаҡ.

Бөгөнгө көндә ауыл халҡын аҙыҡ-түлек, көндәлек кәрәк тауар менән 6 магазин хеҙмәтләндерә һәм тауар әйләнеше якынса 1000 000 һум тәшкил итә.

Үткән 2013 йылда ауыл биләмәһе буйынса
Килем утәлеше түбәндәгесә булды;

| | 2013 | 2012 | Үтәлеш % |
|---|---|---|---|
| 1.НДФЛ | 54726,28 | 40779,28 | 100 |
| 2.ЕНВД | 14640 | 9525 | 100 |
| 3.Налог на имущество | 45746 | 52790,01 | 100 |
| 4.Земельный налог | 117095 | 57826,5 | 100 |
| 5.Гос.пошлина | 6600 | 3400 | 100 |
| 6.Аренда земли | 32550 | 40271,32 | 100 |
| 7.Нотариальный тариф | 1620 | 3630 | 100 |
| Итого | 275979 | 210676,1 | 100 |

2013 йылда 2012 йыл өсөн ер, мөлкәт һәм транспортҡа һалым йыйылды. 228 кешегә уведомление килде. Шуларҙан һалым түләмәүселәр: Ҡәҙерғолов Ғүмәр, Алтынбаева Рәшиҙә, Баймырҙин Альберт, Баймырҙина Сөмбөл, Бикмөхәмәтов Наил, Зыянбаев Фәнил,Ҡаһарманова Фәниә, Мөхәмәтов Зәбир, Яманғолов Фазыл, Яманғолов Мансур, Бикмөхәмәтова Миләүшә.
Түбәндәге граждандарға тиҙ арала һалымдарын түләргә кәрәк;
Зыянбаев Фәниль - 2699
Бикмөхәмәтов Наиль - 1378
Бикмөхәмәтова Миләушә-1206
Алтынбаева Рәшиҙә - 1206

Ерҙәрен документлаштырмағандар
1. Мырҙабаев Альгис
2. Зыянбаев Фәнил
3. Аллабирҙина Зәлия

Бөгөнгө заман талаптарына ярашлы хәҙер һәр беребеҙгә өйҙәрҙе лә документлаштырыр ға кәрәк.
Ауылда бөтәһе хәрби хеҙмәткә яраҡлы 114 кеше иҫәпләнә. 1 егет әрме сафында. 2013 йылда 8 егеткә отсрочка бирелде.

Ауыл биләмәһендә төҙөлөш эштәре әүҙем бара. Замана ҡытыршылыҡтарына ҡарамаҫтан яңы өй төҙөүсе ауылдаштар йылдан-йыл арта. 2013 йылда 3 ғаилә яңы өй туйланы, 4 хужа бура күтәреп башын ябып ултыртты. Өйҙәргә төкөтмәләр төкөтөлә.

Үткән йылда ауыл биләмәһе территорияһында төҙөкләндереү эштәре алып барыу өсөн 400000 (ике йөҙ мең) һум аҡса бүленде:

урамдағы лампочкаларға ремонт өсөн 32134 һумға алынды
Обелиск кәртәләүгә - 20000
Иҫке ҡый түгеү урынын кәртәләүгә - 24746
Һыу алыу урыны эшләүгә - 99828
Һыу алыуға ҡоҙоҡ эшләүгә - 97151
Будка төҙөүгә - 30589
Территорияны таҙалау өсөн генсхемаға - 10000
Урамды яҡтыртыуға – 11141
Юлды ремонтлауға - 33890

Был эштәрҙе башҡарыуға ИКЦ тарафынан смета төҙөлөп, администрациянан раҫлау алынды. Урамды яҡтыртыу өсөн бюджетта 36700 һум ҡаралһа, йыл аҙағынаса 46925 һум тотонолдо.Район юл төҙөү идаралығына юлды ҡарҙан таҙалау өсөн 46925 һум аҡса түләнде.

Пожар хәүефһеҙлеге буйынса даими инструкциялар үткәрелеп тора.Иректе янғын һүндереү дружина ағзалары республика тренировкаларында ҡатнаштылар.

Сельсовет бинаһына 16500 һумға пожар хәүефһеҙлеген белдереүсе прибор ҡуйылды, 10000 һумға хәүеф- хәтәрҙе белдереүсе сигнализация үткәрелде

Бөгөнгө көндә аҫылмалы күпергә документ алыу бурысы һәм ҡаҙнаға иҫәпкә ҡуйыу кәрәк.Шулай уҡ урамдарҙы, зыратты ла ҡаҙнаға иҫәпкә теркәргә кәрәк.

Ауылдың проблемалары күп.Тәрәнуй буйын күтәреү буйынса проект экспертиза үтте. Ләкин эште башҡарырға аҡса юҡ.Ағиҙел ярын нығытыу өсөн проектҡа 14 төр документ эшләп ебәрелде, проект Башгидроповодхоз тарафынан төҙөлә.

Күп балалы ғаиләләргә 10 ер участкаһы Тимерҙән бирелһә, 3 ғәилә Яңы Собханғолдан Йөҙәкәй яланынан алды.Тағы 4 ғәилә иҫәптә тора.

Ауылдң генпланын эшләүгә 200000 һум аҡса ҡаралған ине, Өфө ООО Урал организацияһы тарафынан үлсәү эштәре башҡарҙы, проекты алынды.Генпланды эшләтеп бөтөү өсөн район администрацияһы тарафынан тағы ла 100000 һум бюджетҡа һалынды, 2014 йылда эшләп бөтөләсәк.

Үткән 2013 йылда «Таҙа Ағиҙел" акцияһы уҙғарылып йылға буйҙарын таҙалау өмөләре үткәрелде, "Мәктәпкә барырға ярҙам ит" акцияһына ҡушылырға 5 шәхси эшҡыуарға хат менән мөрәжәғәт иттек, барыһы ла ярҙам итте уларға рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.Оло быуын кешеләре менән берлектә "Ҡорбан", " Ураҙа" байрамдарын мәсеттә сәй табындары ойоштороп, район үҙәгендә йәшәгән ауылдаштарҙы саҡырып, ҙурлап билдәләп үттек.Ауылда ололар, инвалидтар көнө һәр бер байрам билдәләнеп бара.

Округтар араһында «Бөрйәнемде – моңдар иле" фестивале ойошҡанлыҡ менән үтһә, "Һабантуй" байрамы ауыл халҡының тәртипле икәнлеген күрһәтте. Һабантуйҙы, ауылдағы байрамдарҙы үткәреүҙә ярҙам күрһәткән шәхси эшҡыуарҙарға, КФХ- ларға, ауыл Советы депутаттарына ҙур рәхмәт.

Ауылда 12 бала тыуған, 6 ғаилә барлыҡҡа килгән.Үткән йылда 5 бала тәрбиәләүсе Үлмәҫбаева Гөлүзә Вәзир ҡыҙына, Баймырҙина Тамара Сәитғәле ҡыҙына «Әсәлек даны" миҙалы алыуға документтар йүнләп бирелде.Тормош шарттарын яҡшыртыуға мохтаж 25 ғаилә иҫәпкә ҡуйылды. Йыл һайын документ яңынан төҙөлә икәнен онотмай, документтарығыҙҙы ваҡытында яңыртып тороуығыҙ һорала.

Иң ҙур проблема булып ауыл халҡының эре мөгөҙлө малдарына көтөү ойоштороу тора. Көтөүсе ҡуйыу буйынса әллә күпме һөйләшеүҙәр алып барһаҡта эшләргә теләүсе кеше булманы.

Ауылда ветеринар эштәрҙе Сафин Марат, Яубаҫаров Рәмил алып бара.Улар тарафынан ҡотороуға ҡаршы 72 бесәйгә, 40 этҡә, Себер язваһына ҡаршы 270 һыйырға, 139 атка, 278 башмактарға прививка яһалған.Шунан тыш 2985 баш малға төрлө тикшеренеүҙәр, ҡан алыуҙар, ярҙам күрһәтеүҙәр башҡарылған. Бөгөнгө көнгә 5–этҡә генә паспорт алынған, ҡалғандарынала паспорт алыуығыҙ һорала

Ауылда 1 социал хеҙмәткәр 6 кешене хеҙмәтләндерә.Унның эшенә ҡарата оло быуын кешеләренән дәғүәләр булманы.

Халыҡҡа баллонлы газ килтереп таратыу юлға һалынды.

Оло юлға тиклем юл ойошмаларға бүлеп бирелгән, яҙ -йәй айҙарында был юл таҙартылып тора.Хөрмәтле ауылдаштар юл буйына ҡый түкмәүегеҙҙе һорайбыҙ.

Ауылдың бик матур мәсете бар, бөгөнгө көнгә имам-хатиб юҡ.Мөхәмәтов Илшат Өфөгә барып уҡып ҡайтты. Мәсетте йылытырға ауыл халҡынан исемлек төҙөлдө. Хөрмәтле ир-егеттәр ! Исемлекте боҙмай ғына , еренә еткереп, мәсетте йылытыуығыҙ һорала.

Мәсеттең документтары эшләнеү өҫтөндә.Алтынбаев Таһир Талха улы ярҙам итә.Хәйриә аҡсаһынан 4000 һум, ерҙе теркәү өсөн 2250 һум аҡса түләнде.

Уҙған йылда хоҡуҡ боҙоуҙар, енәйәттәр булманы. 1 янғын осрағы булды.

Социаль ауыр хәлдә ҡалған 1 ғаилә иҫәпкә алынды.

Иҫке Собханғол район элемтә узелы Тимер ауылында 89 абонентты хеҙмәтләндерә.45 хужалыҡ АЙПИ телевидениеһы каналын ҡарай, 46 йорт интернет селтәрҙәрен файҙалана.

Район күләмендә үткән сараларҙа әүҙем ҡатнашып барҙыҡ. Район йәрминкәһендә -3-сө урын, йыл эшсеһе конкурсында – 3 урын, Бөрйән батыры -2 – се урын, "Татыу парҙар " конкурсында - гран-при яуланды.

Ошо сараларҙа ҡатнашырға район Советы депутаты Юлсурин Таһир Йәноҙаҡ улы ҙур ярҙам күрһәтте.Мәктәпкә 50000 һумлыҡ спорт инвентаре алыуға ярҙам итте, мәҙәниәт йорто баҡсаһы ҡоймаһын яңыртырға үҙ аҡсаһына имән бағаналар алып бирҙе. Ауыл халҡы исеменән Таһир Йәноҙаҡ улына рәхмәт белдерәбеҙ, уға һаулыҡ, эшендә уңыштар теләйбеҙ.

2-се көн тәртибе буйынса район хәкимиәте башлығының 1-се урынбаҫары Шәрипов Рөстәм Динислам улы сығыш яһаны.Ул үҙенең сығышында Бөрйән районы муниципаль районының 2013 йылдағы эшмәкәрлеге тураһында һөйләне.Муниципаль район советы эшмәкәрлегендә төп принциптарҙың береһе - билдәлелек, асыҡлыҡ.2013 йыл ижтимағи – сәйәси ваҡиғаларға бай булды.Бөрйән районында раҫланған планға ярашлы "Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау" йылына арналған төрлө саралар ойошторолдо.Районда һуңғы йылдарҙа социаль - иҡтисади үҫеш күрһәткестәре тотороҡло булыуы күҙәтелә. Райондың дөйөм майҙаны 444,4 мең гектар, уның урындағы бюджетты тулыландыра торған, йәғни килем биргән өлөшө ни бары 7,1 тәшкил итә, шул иҫәптән 6 – ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге, 0,8 – ауыл биләмәләренең һәм 0,2 процент сәнәғәт йүнәлешендәге ерҙәр.Шәхси йорттар төҙөү, хужалыҡ, сауҙа итеү, бесән сабыу, туризмды үҫтереү һәм башҡа маҡсаттар өсөн граждандар һәм юридик шәхестәргә, фермер хужалыҡтарына 221 га ер ҡуртымға бирелгән. Район буйынса шәхси хужалыҡтарҙа эре мөгөҙлө һәм ваҡ малдар үрсетеү юғары кимәлдә, 6140 ҡорт күсе бар, бөтәһе 1517 ц. бал етештерелгән.Районда төҙөлөш эштәре лә әүҙем бара.Район хәкимиәте йыл барышында ауыл хәкимиәттәре менән берлектә ауылдарҙа социаль- көнкүреш мәсьәләлрен хәл итеү буйынса байтаҡ эштәр башҡарҙы.Район хәкимиәте ҡарарына ярашлы ауылдарҙы төҙөкләндереү, йәшелләндереү буйынса бәйгеләр үтте. Районда төҙөлөш эштәре әүҙем генә бара.Район Хәкимиәте йыл барышында ауыл хәкимиәттәре менән берлектә ауылдарҙа социаль көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеү буйынса байтаҡ эштәр башҡарҙы.Юлдар, йәмәғәт урындары , йорттар һәм шәхси ихаталар эргәһендәге биләмәләр тәртипкә килтерелде. Ауылдарҙың генераль пландарын төҙөү дауам итә.2013 йылдың 1 декабренә районда 16636 кеше иҫәпләнә. 2013 йылда 357 сабый донъяға килгән, 185 кеше донъя ҡуйған, 191 пар ғаилә ҡорған.Районда етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ителгән 75 бала иҫәптә тора, уларҙың 16-һы үкһеҙ етем. Етем балалар өсөн 5 йорт һатып алынған, 6 бала торлаҡлы булыу бәхетенә ирешкән.Халыҡтың һаулыҡ торошон яҡшыртыу һәм төрлө медицина мәсьәләләрен хәл итеүҙә район үҙәк дауаханаһы 20 маҡсатлы программаны тормошҡа ашыра.2013 йылда белем биреү системаһын үҫтерегә ҙур иғтибар буленде.Бөгөнгө заман уҡытыусылар һәм мәғәриф хеҙмәткәрҙәре алдында бик етди бурыстар ҡуя. Район хәкимиәтенең мәҙәниәт бүлеге район мәҙәниәт һарайы, ауыл мәҙәниәт йорттары, китапханалар менән тығыҙ бәйләнештә эшләй.Район таланттары республика сәхнәләрендә уңышлы сығыш яһап, Бөрйәнебеҙҙең данын күтәрҙеләр. Бөрйән районында спортты үҫтереү эше һөҙөмтәле бара.Беҙҙең спортсыларыбыҙ районда, республикала ғына түгел, Рәсәй һәм халыҡ-ара ярыштарҙа яҡшы һөҙөмтәләргә иреште. 2013 отчет йылында район хәкимиәте халыҡтың ижтимағи хәлендә мөмкин тиклем яҡыныраҡ булырға, килеп тыуған мәсьәләләрҙе ваҡытында хәл итергә тырышты. Ауылдарҙа, ойошма һәм предприятиеларҙа халыҡ һәм хеҙмәтсәндәр менән осрашыуҙар эҙһеҙ ҡалманы.Киләсәккә пландар күҙаланды.2014

йыл Рәсәйҙә һәм Башҡортотсанда Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителде. Мәҙәниәтте үҫтереү буйынса Хөкүмәт планына ярашлы, районыбыҙҙа тейешле эштәр башҡарыу мөһим.

Сығыш яһанылар

1.Баймырҙина Миләүшә Саҙритдин ҡыҙы – мәктәпкә спортзал төҙөү кәрәк, балалар баҡсаһында 2-се төркөм ҡасан асылыр?

2.Яубаҫаров Нөғәмән Шәрәфулла улы- ауылдың үрге осона тәбиғи газ үтерме?

3.Байчурина Гөлшат Ғариф ҡыҙы – Баязитов Мир Рауил улына өйөн төҙөп бөтөргә ағас булырмы, Ағиҙел йылғаһы яр буйына ҡый түкмәһәләр ине

4.Солтанов Альберт Әбүзәр улы- Ағиҙел яры буйындағы бағаналарға электр яҡтыртҡыстар ҡуйырға кәрәк

5.Баймырҙина Йәнифә Шәһит ҡыҙы – Баймырҙин Әлфир Миҙәхәт улы бәләкәй өйҙә тора, төҙөлөш өсөн ағасты 2017 йылда ғына буласаҡ тигәндәр, йәштәргә төҙөлөшкә ағас бирелмәйме.

6.Дәүләтбирҙина Кәримә Ағзам ҡыҙы – улым Дәүләтбирҙин Вильдан Билал улына төҙөлөшкә ағас кәрәк.

Председатель: Арслангужина Р.К.

Секретарь: Буранова